**А**

Абайламай һөйләгән – ауырымай үлгән.
Лишнее говорить – себе вредить.

Абынған һөрөнгәндән көлә.
Горшко над котлом смеется, а оба черны.

Аҡылһыҙ аҡырып алдырыр.
Дураки горлом берут.

Ат аҙғыны тайға эйәрә.
Во всех годах, да не во всех умах.

Ашыҡҡан – ашҡа бешкән.
Поспешишь, людей насмешишь.

**Б**

Бал тәмле тип бармаҡты тешләп булмай.
Видит око, да зуб неймет.

Бары – бергә, юғы – уртаҡ.
Что есть – вместе, чего нет – пополам.

Бары менән байрам, һыны менән сайран.
Чем богаты, тем и рады.

Башҡа бәлә төшмәй аҡыл кермәй.
Придет беда – купишь ума.

Баш һау булһа, бүрек табылыр.
Была бы голова, шапка найдется.

**В**

Вайымһыҙҙың эше алымһыҙ.
Делать как-нибудь, так никак и не будет.

Ваҡыт етмәй сәскә атмай.
Всякое семя знает свое время.

Ватыҡ арбаға бишенсе тәгәрмәс.
Пятое колесо в телеге.

Вәғәҙә - иман.
Уговор дороже денег.

Вәли үҙенсә, Ғәли үҙенсә.
Всяк молодец на свой образец. (Кто как хочет, так и хохочет.)

**Ғ**

Ғилеме барҙың телеме бар.
Кто грамоте горазд, тому не пропасть.

Ғилем – ҡош, аҡыл – ҡанат.
Ученье – птица, ум – крылья.

Ғәйебеңде таныу – ярты төҙәлеү.
Искреннее раскаяние – половина исправления.

Ғәйепле үҙ күләгәһенән дә ҡурҡа.
Виноватый своей тени боится.

Ғәйеп һүҙ һөйләһәң, ғәйеп һүҙ ишетерһең.
Говоря про чужих, услышишь и про своих.

**Д**

Димсе диңгеҙ кистерә.
По нахвалу и тухлые яйца покупают.

Донъя башһа, тоҙ ҙа татлыға әйләнә.
В нужде и соль сладкой кажется.

Дөйә арғымаҡҡа иш булмаҫ.
Осел коню не попутчик.

Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ.

Что правда, то правда.

Дуға бар йортта доға бар.
Тот живет в добре, у кого лошадь во дворе.

**Ҙ**

Ҙур йыртыҡты бәләкәй ямау ҡапламай

Ҙурлыҡ кәүҙә менән түгел, ғилем менән

Ҙур ағастың күләгәһе лә киң.

Ҙурҙы уйлап әҙҙән ҡоро ҡалма

Ҙур талантҡа - ҙур талап

**Е**

Ебегән ауыҙҙан серегән һүҙ сығыр

Егет булһа, батыр булһын, ҡыҙ булһа, матур булһын.

Егет ҡыйыу, ҡыҙ һылыу булғаны яҡшы.

Егет егәр, ҡыҙ сибәр булһын.

Егет һөйһә - ала, ҡыҙ һөйһә - ҡала

**Ж**

Жәүзә (Игеҙәк йондоҙлоғо)кермәй йәй булмай, Ҡәүес (Уҡсы) кермәй ҡыш булмай

**З**

Закондың ҡулы оҙон

Законы юҡ йорт булмаҫ

Залим золом итер, золомо башына етер

Залим түрә күп һөйләр,ғәҙел түрә әҙ һөйләр

**И**

Игелек ит тә һыуға һал - халыҡ белер,халыҡ белмәһә балыҡ белер.

Иген икһәк-икмәк,быҙау һуйһаҡ-туҡмаҡ

Иген келәттә, кеше хеҙмәттә күренә.

Иген ҡамылынан билгеле.

Иген төбө — ҡыуаныс.

**Й**

Йоҙағын эшләгән асҡысын да эшләр.

Йоҡлаған йыланды уятма

Йоҡлаған - ҡалыр, уяу - донъяны алыр.

Йоҡо бесәйгә генә моң.

Йоҡоһо оҙондоң бәхете ҡыҫҡа.

**К**

Каруан күсер — ут ҡалыр, халыҡ күсер —- йорт ҡалыр.

Кейеҙ ҡалыны беләккә төшә.

Кейеменә ҡарап ҡаршылайҙар, аҡылына ҡарап оҙаталар.

Кем ерендә йәшәһәң, шуның һыуын эсерһең,

Кем менән даның сыҡһа, шуның менән йәнең сыҡһын.

**Ҡ**

Ҡабалан эшкә аҡыл эйәрмәй.

Ҡабаланған ҡабырғаһын һындырған.

Ҡабаландың аты өҙлөгә, ялҡауҙың аты һөрлөгә.

Ҡағын, һөртөн дә тағы эшкә тотон.

Ҡабат эшләнгән эш һабаҡ булыр.

**Л**

Лаф (ҡуҡырайыу) менән былау бешмәç

**М**

Малы юҡтың йәне юҡ.

Малы юҡтың ҡайғыһы юҡ.

Малың булһа, көтөүсе табылыр.

Маңлайы тирләмәгәндең ҡаҙаны ҡайнамай.

Маңлайҙан аҡҡан әсе тир, ергә тамһа, ем булыр.

**Н**

Насар арба юл боҙор, насар түрә ил боҙор.

Нефть ҡәҙерен яғыусынан бигерәк табыусы белә

Ни һөйләһәң, шуны ишетерһең

Ныҡ һөйә тип һөйөнмә, уртаса һөйә тип көйөнмә

Нәпсе менән шайтан бер атанан

**О**

Орлоғона күрә уңышы

Осһоҙ ҡаҙыҡ ергә кермәç

Оçта — донъя тотҡаһы.

Оятһыҙҙың күтәне ҡырҡ ҡолас

Ояты барҙың намыçы бар

**Ө**

Өй артында ҡорто барҙың өй эсендә ҡото бар.

Өйгә етһә эт уҙыр.

Өмөт өҙөлмәһә - ризыҡ өҙөлмәç

Өмөтһөҙ - шайтан

Өçкә кейгән күренә,тамаҡка киткән күренмәй.

**П**

Пар ҡанат талмай

Планһыҙ эш — тоҙһоҙ аш.

Питрау үтте - йәй үтте

Подпись иткән - под суд киткән

Покрау етте - ҡыш етте.

**Р**

Ришүәт ишектән керһә, иман мөрйәнән ҡасыр

Рәхимһеҙ кешенән рәхимле эт яҡшы

Рәхәт менән михнәт бер түгел

Рәхәт төбө - көйөнөс,

Михнәт төбө - һөйөнөс

Рәхәтен яраткас, яфаһына ла түҙ

**С**

Сабый барған юлда ҡалыр.

Сабыр эшен бөтөрөр, ҡауҙыр үҙен бөтөрөр.

**Р**

Михнәт төбө - һөйөнөс

**С**

Ришүәт ишектән керһә, иман мөрйәнән ҡасыр

Рәхимһеҙ кешенән рәхимле эт яҡшы

Рәхәт менән михнәт бер түгел

Рәхәт төбө - көйөнөс,

Рәхәтен яратҡас, яфаһына ла түҙ

Сабый барған юлда ҡалыр.

Сабыр эшен бөтөрөр, ҡауҙыр үҙен бөтөрөр.

Сумар - үлмәҫкә бер тумар

Сәсмәнең иһә яҙ көнө, ни йыйырһың көҙ көнө?

**Т**

Табан аҫтындағын күрмә, танау аҫтындағын күр

Табылмаған мал таш аҫтында.

Тауына күрә төлкөһө.

Тауҙай талабың менән бергә күбәләй эшең күренһен

Тән зиннәте - кейем, аҡыл зиннәте - ғилем.

**У**

Уйламайынса башлама, башланыңмы ташлама.

Уйламайынса ҡылған эштән аяғүрә күргән төш яҡшы.

Ултырған урыныңдан утын киҫмә.

Ултырған ерҙән ут күҙәмә.

Ултырған урыныңдан утын киҫмә.

Ултырған ерҙән ут күҙәмә.

**Ү**

Үгеҙ — үгеҙгә, үгеҙ — мөгөҙгә.

Үгеҙ үлһә - ит, арба ватылһа - утын

Үҙ түрем үҙемә иркен.

Үҙ түремдә үҙем түрә.

Үтә булдыҡһыҙ булһаң, ашһыҙ ҡалырһың.

**Ф**

Фарты (уңышы) юҡтың даны юҡ

Фирүзә ташы - йөҙөк ҡашы

Фәлән ерҙәге фирүзә таш йөҙөккә ҡаш була алмай

Фәрештә булһа - ҡанатлы,

Шайтан булһа - ҡойроҡло

Формаң менән маҡтанма, нормаң менән маҡтан.

**Х**

Халыҡ барҙа хаҡлыҡ бар.

Халыҡ бар ерҙә батыр бар.

Хан ҡыҙының битендә лә бармаҡ битендәй миң булыр

Хан урлай, халыҡ юллай

Хужа юҡта ат хужа.

**Һ**

Һабанда һайрашмаһаң, ырҙында ыңғырашырһың

Һаҙ булһа ла яҙ булһын

Һинән хәрәкәт, минән бәрәкәт.

Һорау - бер яман, бирмәү - ике яман.

Һөйгән йәр - һөйәгең елеге

**Ш**

Шаҙра йөрәк яндыра

Шыраулы ағас ҡулға керә

Шәп аҡҡан йылға тиҙ ҡорор

Шәп аша ла, шәп эшлә

Шәп яуған ямғыр ергә һеңмәй

**Ы**

Ыласындың ҡоласы киң

Ынйы бөртөгө ҙур булмай

Ырыулы ил — оялы ҡаҙ.

Ырыулының уғы юғалмаç.

Ырыуына күрә йолаһы, биреүенә күрә доғаһы.

**Э**

Эҙләгән ҡорт бал табыр, эшләгән кеше мал табыр.

Энә осо хәтле ут, тубал ҙурлығы төтөн.

Эңер төшкәс күләгә кәрәкмәй

Эш майлы бутҡа түгел.

Эш менән ваҡыт тиҙ үтер.

**Ә**

Әбей белен бешерә, бабай ҡабыҡ төшөрә.

Әйтмәһен кеше, әйтеп торһон эше.

Әкрен барған ҡалыр, йүгереп барған алыр

Әтәс үҙ сүплегендә үҙе мырҙа

Әтәлгене тый, ҡарсығаны һуй.

**Ю**

Юғалған ҡуйҙың ҡойроғо ҙур

Юғары осҡан түбән ҡуныр

Юҡҡа һин дә туҡ,мин дә туҡ

Юлдың тигеҙе, малдың һимеҙе,ирҙең оҫтаһы, һүҙҙең ҡыҫҡаһы яҡшы

Юлын белмәгән-юлда илап ултырған

**Я**

Яҙғы сәсеү — бер генә ваҡыт.

Яҙҙың бер көнө йылды туйҙыра

Ярма һораған көн күрмәҫ, ҡаҙна һораған ил уңмаҫ.

Яҡкан ағас ял табыр, йөрөгән аяҡ мал табыр

Ялҡау аҙ эшләй, аҙ эшләһә лә,күп тешләй